# Тәүге композиторҙар



**Композитор – музыкаль әҫәр яҙыу ижад иткән кеше.**
**Композиция – музыкаль әҫәр яҙыу теорияһы.**





(1895—1938)

**Әлмөхәмәтов Ғәзиз Сәлих улы (*Альмухаметов Газиз Салихович*) —** башҡорт һәм татар йырсыһы, композитор. БАССР-ҙың халыҡ артисы (1929), беренсе йырсы, хөрмәтле дәрәжә лайыҡ.

Ғәзиз Сәлих улы Әлмөхәмәтов 1895 йылдың 20 октябрендә Ырымбур губернаһы Ырымбур өйәҙенең (хәҙер Башҡортостан Республикаһы Көйөргәҙе районы) Мораптал исемле (хәҙерге Иҫке Мораптал) башҡорт ауылында донъяға килә.



**Заһир Исмәғилев  (1917 – 2003) – СССР-ҙың халыҡ артисы, М.И. Глинки исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты, Салауат Юлаев исемендәге Башҡортостан Республикаһы Дәүләт премияһы лауреаты.**

**Заһир Ғариф улы Исмәғилев 1916 йылдың 26 декабрендә Ырымбур губернаһы Верхнеурал өйәҙе Үрге Сермән ауылында тыуған. 1936 йылда Башҡорт драма театры эргәһендәге студияны тамамлай, Мәскәү консерваторияһы эргәһендәге Башҡорт милли студияһында уҡыуын дауам итә.**

Композитор «***Салауат Юлаев» (1955), «Шәүрә» (1963), «Гөлзифа» (1967), «Ағиҙел тулҡындары» (1972), «Урал илселәре» (1982), «Аҡмулла» (1988) опералар**ын, «**Ҡоҙаса» (1959), «Алмаҡай» (1990)*** опереттаIарын яҙған; ул шулай уҡ бик күп кантата әҫәрҙәре, романстар, йырҙар, симфоник һәм камера-инструменталь әҫәрҙәре, драма спектаклдәренә көйҙәр авторы. Сермән ауылында З.Ғ. Исмәғилевтың Йорт-музейы эшләй. Өфө дәүләт сәнғәт академияһына уның исеме бирелгән.



**Х. Ф. Әхмәтовтың (1914 – 1993) ижады тематика һәм жанрҙары буйынса күп төрлө.** Ул — опера һәм балет, симфоник һәм хор әҫәрҙәре, камера-вокаль һәм инструменталь әҫәрҙәр, спектакль һәм кинофильмдарға көйҙәр авторы. Оҫта тарафынан ижад ителгән өс йөҙҙән ашыу йыр һәм романстар, бер нисә вокаль цикл, балладалар, поэмалар беҙҙең музыкаль мәҙәниәттең алтын хазинаһына инде.

**"Замандаштар" операһы ( Баязит Бикбай либреттоһы) һәм «Тау бөркөтө « балеты (Нариман Сабитов менән берлектә) тәүге ҡуйыуҙа уҡ ҙур уңыш менән**



**Мәсәлим Вәлиев**
**1888 - 1956**




**1888 Йылда Ырымбур ҡалаһында тыуа.**



**скрипка**

Башҡорт композиторы, ғәжәйеп оҫта скрипкасы һәм йәмәғәт эшмәкәре, башҡорт профессиональ музыкаһына нигеҙ һалыусыларҙын береһе.



**Рафиҡ Сәлмәнов**
**1917 - 2003**

1917 йылда Әбйәлил районы Асҡар ауылында тыуған. «Йәш дуҫтар йырлай», «Илемә сәскә бүләк итәм» тигән вокаль йыйынтыҡтары балаларға ғына тәғәйенләнгән. Уның баян һәм фортепьяно өсөн инструменталь пьесалары музыка мәктәптәре, училищелар һәм башҡарыусы музыканттар өсөн тәғәйенләнгән. Рафиҡ Сәлмәновтың иң кескәйҙәр өсөн яҙылған «***Тышта ҡар яуа» (Ҡадир Даян), уҡыусылар өсөн «Хеҙмәт йыры» (Әхтәм Ихсан), «Игенселәр йыры» (Шәриф Бикҡол), «Һалдат моңдары» (Зәйни Рафиҡов), «Әбйәлил» (Шәкир Бикҡолов)*** йырҙарынан башлап Рәми Ғарипов һүҙҙәренә яҙылған «Минең йондоҙом», «Юл йыры», «Дан һиңә, дан, Башҡортостан», «Именлек һөнәре», «Хушлашыу», Ҡадир Даян шиғырына яҙылған «Дуҫлыҡ йыры», «Беҙҙең ауыл ҡыҙҙары», «Таң йыры», «Ҡарасәс», Нәжиб Иҙелбай һүҙҙәренә «Сирень сәскәләре», Абдулхаҡ Игебаев һүҙҙәренә «Күңел һағышына йәшлек эҙҙәренән», «Дилбәр», Ғилемдар Рамазанов һүҙҙәренә «Эҙләйем һине» йырҙарына тиклем кесеһе лә, олоһо ла, һәр кем белә.
Уның тынлы ағас инструменттар өсөн «Турат тауы» тигән музыкаль легендаһы, скрипка һәм фортепьяно өсөн «Яҙғы вальс» әҫәре киң билдәле.



Халиҡ Шакир улы Заимов (1953—1954).башҡорт балет, хор һәм инстументаль музыка үҫешенә ҙур өлөш индерә.
Ул Силәбе өлкөһенен Һултай ауылында тыуа.

Композитор А.Э. Спадавеккиа менән бергә «Аҡбуҙат», А.Г. Чугаев менән авторҙашлыҡта «Ҡара йөҙҙәр» балеты, Баязит Бикбай шиғырына «Башҡортостан» кантатаһы һәм балалр өсөн байтаҡ йырҙар яҙа.